БАШҠОРТОСАН РЕСПУБЛИКАҺЫ КӨЙӨРГӘҘЕ РАЙОНЫ
МУНИЦИПАЛЬ РАЙОН ХАКИМИӘТЕНЕҢ МӘҒАРИФ БҮЛЕГЕ

«Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы муниципаль райондың Яңы Таймаҫ ауылы Р.Солтангәрәев исемендәге гимназияһы»

**Ҡаралды**

МБ ултырышы
Протокол № 1

31 август 2023 й.

МБ ет.________________

**Килешелде**

МБ ултырышы
Протокол № 1
31 август 2023 й.
УТЭ буйынса директор урынбаҫары Байғотлина Л.Х. ________.

**Раҫлайым**

Бойороҡ № 120-од
« 1 » 09 2023 й.
гимназия директоры
Әбсәләмов Р.Р.
________

# “Башҡорт әҙәбиәте” уҡыу предметының эш программаһы

## 10-11-се класс уҡыусылары өсөн

## 2023-2024 уҡыу йылына

Башҡарҙы:
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әҙеһәмова Гөлназ Флүр ҡыҙы

Яңы Таймаҫ 2023 й.

# АҢЛАТМАЛЫ ЯҘЫУ

Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған төп дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-9-сы кластары өсөн «Туған (башҡорт) әҙәбиәте» предметы буйынса белем биреү өлгө эш программаһы (артабан – Программа) уҡыу предметының һәр йыл буйынса йөкмәткеһен, уҡыусыларҙы Туған (башҡорт) әҙәбиәте уҡыу предметы саралары менән уҡытыу, тәрбиәләү һәм үҫтереү буйынса төп методик стратегияларҙы билдәләй».

Программаның норматив хоҡуки базаһы:

-Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы;

-«Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында» 2012 йылдың 29 декабрендәге № 273-ФЗ Федераль закон (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

-«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» 1991 йылдың 25 октябрендәге № 1807-1 Россия Федерацияһы законы закон (үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр менән);

-Төп дөйөм белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарты (Рәсәй Федерацияһы Мәғариф министрлығының 2021 йылдың 31 майындағы № 287 бойороғо менән раҫланған);

-Төп дөйөм белем биреүҙең төп өлгө программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән хупланды, 2022 йылдың 18 мартындағы № 1/22 протокол);

-Тәрбиә биреүҙең өлгө программаһы (дөйөм белем биреү буйынса федераль уҡытыу-методик берләшмәһе ҡарары менән хупланды, 2022 йылдың 23 июнендәге №1/22 протокол).

Программа Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының башҡа төбәктәрендә башланғыс дөйөм белем биреү программаларын туған (башҡорт) телдә уҡытыуҙы ғәмәлгә ашырыусы дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн эшләнгән һәм предмет өлкәһе уҡытыу туған телдә алып барылған «Туған тел һәм әҙәбиәт» менән эшләүсе уҡытусыларға методик ярҙам күрһәтеүгә йүнәлтелгән.

Дәреслектәр һәм эш программаларын төҙөүсе авторҙар уҡыу материалының күләмен һәм йөкмәткеһен киңәйтергә, уҡыусыларҙы үҫтереүгә һәм тәрбиәләүгә ярҙам итеүсе эш төрҙәрен тәҡдим итергә хоҡуҡлы.

Программа төп дөйөм белеү биреү федераль дәүләт стандарттары һөҙөмтәләре талаптарына ярашлы төҙөлдө (артабан – ФДББС). Унда шулай уҡ дөйөм белем биреүҙең универсаль уҡыу эшмәкәрлеген үҫтереү һәм формалаштырыу программаһының төп идеялары һәм ҡағиҙәләре, башланғыс дөйөм белем биреү өсөн өлгөлө белем биреү программалары менән күсәгилешлек иҫәпкә алына.

Программа нигеҙендә кешенең рухи тормошон, уның әҫәрҙә сағылдырылған эске донъяһын, ә уҡыусының үҙ донъяһы – төп ҡиммәт булараҡ ҡарарға мөмкинлек биреүсе гуманитар педагогика идеялары һәм гуманитар педагогик принциплар ята. Был концепцияла әҙәбиәт дәресе кешенең һығылмалыҡ, вариативлыҡ, диалог ҡора белеүенә хас булған гуманитар фекерләү стиленә һәләтен стимуллаштырыу һәм үҫтереү, ә дөйөм әҙәби белем биреү – уҡыусыларҙы мәҙәниәт ҡаҙаныштарына йәлеп итеү, уларҙы ижади эшмәкәрлеккә индереү өсөн шарттар тыуҙырыу сараһы булараҡ ҡарала.

Программа эш программаларын төҙөү өсөн йүнәлеш булып тора: ул уҡыу курсының инвариант (мәжбүри) өлөшөн билдәләй, унан ситтә белем биреүҙең йөкмәткеһенең вариатив өлөшөн тәшкил итеүсе авторлыҡ һайлау мөмкинлеге ҡала. Эш программалары һәм дәреслектәрҙең авторҙары уҡыу материалын структуралаштырыуға, уны өйрәнеүҙең эҙмә-эҙлеклелеген билдәләүгә, йөкмәткене киңәйтеүгә, шулай уҡ белем, оҫталык һәм эшмәкәрлек алымдарын формалаштырыу, уҡыусыларҙы үҫтереү, тәрбиәләү һәм социалллаштереү юлдарын билдәләүгә үҙ ҡараштарын тәҡдим итә алалар.

Программала башланғыс дөйөм белем биреү программаларында тәҡдим ителгән барлыҡ төп эшмәкәрлек төрҙәрен үҫтереү ҡаралған. Әмма Программаның йөктәмкеһе, беренсенән, урта белем биреү системаһының предмет йөкмәткеһенә, икенсенән, уҡыусыларҙың психологик һәм йәш үҙенсәлекләренә бәйле.

Программа башҡорт телен белеүсе уҡыусылар өсөн эшләнгән.

Программаның йөктәмкеһе системалы-эшмәкәрлек алымына ярашлы төҙөлгән һәм төп дөйөм белем биреү программаһының «Туған тел һәм туған әҙәбиәт» предметы өлкәһе өлөшөнә ФДББС (федераль дәүләт белем биреү стандарттары) ҡуйған талаптар һөҙөмтәләренә ирешеүгә йүнәлдерелгән.

“Әҙәбиәт” фәнен өйрәнеүҙең **төп маҡсаттары** булып түбәндәгеләр тора:

-донъяға гуманистик ҡарашы, милли үҙаңы һәм дөйөм Рәсәй гражданлығы үҙаңы, патриотизм тойғоһона эйә булған, рухи үҫешкән шәхес формалаштырыу;

-шәхестең уңышлы социализацияһы һәм үҙ-үҙен реализациялау өсөн кәрәк булған интеллектуаль һәм ижади һәләтлеген үҫтереү;

-уҡыусыларҙың башҡорт, рус һәм донъя әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙаныштарын аңлауы, уларҙы уҡыу һәм анализлау, һүҙ сәнғәтенең образлы фекерләүгә нигеҙләнеүен, художестволы форма һәм йөкмәтке берлеген, сәнғәттең тормош менән бәйле, тарихи булыуын аңлауы;

-художестволы тексты уҡыу, комментарий биреү, анализлау күнекмәләрен этап менән эҙмә-эҙлекле формалаштырыу;

-художестволы текста йәки башҡа теләһә ниндәй телмәрҙә һалынған мәғәнәләрҙе аңлау алгоритмдарына эйә булыу, үҙеңдең тексыңды төҙөү, уҡылған әҫәр тураһында шәхси баһаңды һәм фекереңде еткерә белеү;

-дөйөм уҡыу күнекмәләренә һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә эйә булыу (эшмәкәрлектең маҡсатын билдәләү, уны камиллаштырыу, библиографик эҙләнеүҙәрҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе табыу һәм уны эшкәртеү, Интернет менән файҙаланыу һ.б.).

Башҡортостан Республикаһының башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн йыллыҡ өлгө уҡыу планы әҙәбиәтте 70 сәғәт күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота: 10-сы класта – 35 сәғәт, 11-се класта – 35 сәғәт.

**Уҡыу-уҡытыу методик комплекттары:**

Башҡорт әҙәбиәте.Урта мәктәптең 10-сы класы өсөн. Ғ.Б.Хөсәйенов, М.Ғ.Ғималова, Р.З.Шәкүров. Өфө, Китап, 2018.

Башҡорт әҙәбиәте. Хрестоматия.10 класс. Ғ.Б.Хөсәйенов, М.Ғ.Ғималова, Р.З.Шәкүров. Өфө, Китап, 2018.

Хәҙерге  башҡорт әҙәбиәте. Урта мәктәптең 11 класы өсөн әсбап. Ғ.Б.Хөсәйенов, Р.Н.Байымов. Өфө, Китап, 2018.

Хрестоматия: Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте. Урта мәктәптең 11 класы өсөн.  Ғ.Б.Хөсәйенов, Р.Н.Байымов. Өфө, Китап, 2018.

**“Туған әҙәбиәт” предметын өйрәнеүҙең**
**планлаштырылған һөҙөмтәләре**

Тулы урта  мәктәпте тамамлап сығыусы уҡыусыларҙың әҙәбиәт фәнен өйрәнеү һөҙөмтәһендә алған:

**шәхси һөҙөмтәләр:**

-шәхестең рухи-әхлаҡ сифаттарын камиллаштырыу, күп милләтле Ватанға һөйөү тойғолары, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү;

- танып белеү һәм коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын файҙаланыу (һүҙлектәр, энциклопедиялар, Интернет-ресурстар һ.б.);

**метапредметһөҙөмтәләре (танып белеү, регулятив, коммуникатив):**

-проблемаларҙы аңлай белеү, гипотеза ҡуйыу, материалдарҙы структураға һалыу, үҙ позицияһын иҫбатлау өсөн аргументтар һайлау, телдән йәки яҙма текстарҙа сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен билдәләү, һығымталарҙы формалаштырыу;

- эшмәкәрлекте үҙ аллы ойоштороу оҫталығы, уны баһалау, ҡыҙыҡһыныуы сфераһын билдәләү;

- төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эшләү күнекмәһенә эйә булыу, уны табыу, анализлау, үҙ эшмәкәрлегендә файҙаланыу,

- үҙенең йәш мөмкинлектәренән сығып компьютер грамоталылығына эйә булыу, кәрәкле мәғлүмәт йыйыу маҡсатында Интернетҡа сыға белеү, тексты баҫыу, уны эшкәртә белеү,

-аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу, уның буйынса һорауҙарға яуап биреү;

-сағыштырыу, анализ, синтез, дөйөмләштереү кеүек логик эшмәкәрлеккә эйә булыу, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен һәм оҡшашлыҡты булдырыу;

әңгәмәсеһенең фекерен тыңларға һәләтле булыу, тикшерелгән предметҡа ҡарата үҙенең нигеҙле ҡарашын әйтә белеү һәм конфликлы хәлдәрҙән сыға белеү;

**предмет һөҙөмтәләре:**

1) танып - белеү сфераһында:

- башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтарҙың фольклорында, боронғо әҙәбиәт вәкилдәренең, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблемаларҙы аңлау;

- художестволы әҫәрҙең яҙылыу дәүере менән бәйләнешен аңлау, унда сағылған ваҡыт, әхлаҡ сифаттары һәм уларҙың бөгөнгө көн яңырыуын асыҡлау;

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлай белеү, теге йәки был әҫәрҙең ниндәй жанр төрөнә ҡарауын билдәләү, темаһын, идеяһын, әхлаҡ пафосын аңлау, уның геройҙарына характеристика биреү, бер йәки бер нисә әҫәрҙең геройҙарын сағыштырып ҡарау;

- әҫәрҙең сюжетын, композицияһын, тасуири һүрәтләү сараларын билдәләү, әҫәрҙең идея-художество йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен аңлау (филологик анализ элементтары);

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлағанда элементар әҙәби терминдар менән эш итә белеү;

2) ҡиммәт-ориентация сфераһында:

- башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән таныштырыу, уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән сағыштырыу;

- башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәренә ҡарата уҡыусыларҙың үҙ ҡарашын булдырыу һәм уларҙы баһалау;

-өйрәнелгән әҙәби әҫәрҙәргә үҙ интерпретацияһын булдырыу (айырым осраҡтарҙа);

- автор позицияһын аңлау, уға ҡарата үҙ ҡарашын булдырыу;

3) коммуникатив сферала:

- төрлө жанрҙарҙа яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлы итеп уҡыу һәм уларҙың йөкмәткеһен адекват ҡабул итеү;

- проза әҫәрҙәрен йәки уларҙың өлөштәрен текста ҡулланылған башҡорт теленең тасуири һүрәтләү сараларын һәм цитаталар ҡулланып һөйләй белеү;

- тыңланған йәки уҡылған текст буйынса һорауҙарға яуап бирә белеү, телдән төрлө текстағы монолог телмәр төҙөү, диалог алып барыу оҫталығына эйә булыу;

- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең тематикаһы, проблематикаһы менән бәйле изложение, инша яҙыу, класта һәм өйҙә ижади эштәр, әҙәби һәм дөйөм мәҙәниәт темаларына рефераттар яҙыу;

4) эстетик сферала:

-һүҙсәнғәтебулараҡәҙәбиәттеңобразлылыҡтәбиғәтенаңлау; - әҙәбиәҫәрҙәрҙе эстетик ҡабулитеү, эстетик зауыҡ формалаштырыу; - башҡорт һүҙҙәренең эстетик функцияһын, әҙәби әҫәрҙәрҙә художестволы образдар тыуҙырыуҙа тасуири һүрәтләү сараларының ролен аңлау.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**10 класс**

***Башҡорт совет осоро әҙәбиәтенең формалашыуы (1917-1929йылдар).*** Яңы осор әҙәбиәтенең социаль-тарихи ерлеге, уның йүнәлештәре. Тәүге драмалар. 20-се йылдарҙа проза, поэзия, драматургияның үҫеше.*Әҙәбиәт теорияһы*. Әҙәби процесс.

***Д.Юлтый.***Биографияһы, эшмәкәрлеге. Шиғырҙары, поэмалары.”Ҡарағол”драмаһы, ”Ҡан”романы. *Әҙәбиәт теорияһы. Художестволы әҙәбиәттең теле. Әҫәрҙә автор теле һәм персонаждар теле.*

***Ә.Вәлиди.***Тормошо, дәүләт эшмәкәрлеге. Ғалимлығы. Китаптары. ”Хәтирәләр”ҙең жанр, стиль үҙенсәлеге.

***М.Буранғолов.***Тормош юлы, эшмәкәрлеге. М.Буранғолов-сәсән, фольклорсы.М.Буранғол –драматург.”Башҡорт туйы” драмаһы.

***Ғ.Хәйри.*** Биографияһы. Проза әҫәрҙәре. ”Боролош”романы. Тарихи осор, төп проблемалары, образдары.

***Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте.*** Был йылдарҙаәҙәбиәттә төп тематика. Поэзия. Проза. Драматургия. Репрессияға эләккән яҙыусылар.

***Һ.Дәүләтшина***.Яҙыусының фажиғәле яҙмышы, ҡаһарманлығы. Башланғыс ижады. Хикәйәләре. ”Айбикә”повесы. ”Ырғыҙ”романының яҙылыу тарихы, идея-тематик йөкмәткеһе. Романда күтәрелгән төп проблемалар, төп образдар. *Әҙәбиәт теорияһы*. Әҙәби тип. Прототип. Роман-эпопея.

***Әҙәби портреттар. С.Мифтахов***.”Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт”драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе.

***Ғ.Сәләм.***”Бала”поэмаһы. Ғаилә, бала тураһында. Сәйҙел менән Зәйнәп образдары. Поэманың художестволы үҙенсәлектәре.

***Бөйөк Ватан һуғышы йылдары әҙәбиәте.*** Был осорҙа әҙәбиәттең бурыстары, үҙенсәлеге. Оператив жанрҙар. Публицистик поэзия. Очерк жанры. Хикәйәләр, поэма, балладалар. Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яҙыусылар.

***Р.Ниғмәти.*** Яҙыусының тормошо һәм ижады. Башланғыс ижады.Утыҙынсы йылдар поэзияһы. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары поэзияһы. ”Үлтер, улым, фашисты!”, ”Һинең кәләшеңдең хаттары”. Һуғыштан һуңғы йылдар ижады. “Һаҡмар ҡыҙы” поэмалары. *Әҙәбиәт теорияһы.* Лирик герой тураһында төшөнсә.

***Баязит Бикбай.*** Биографияһы һәм ижад юлы.”Ҡарлуғас”драмаһы. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары ижады. Очерктары. Һуғыштан һуңғы йылдар ижады. Проза.”Аҡсәскә” повесы. ”Салауат” драмаһы. *Әҙәбиәт теорияһы.* Тема.

***З.Биишева.*** Биографияһы һәм ижад юлы. Шиғырҙары. Трилогия. ”Яҡтыға” трилогияһының идея-тематик йөкмәткеһе. Сағылған осор, күтәрелгән проблемалар, образдар системаһы. Халыҡтың азатлыҡ өсөн көрәше. Художестволы үҙенсәлектәре.

***Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте.*** Башҡорт әҙәбиәтенә ҡылыҡһырлама. Поэзия. Проза. Драматургия. Башҡорт яҙыусыларының икенсе съезы.

***Н.Нәжми***. Биографияһы, йәмәғәт эшмәкәрлеге. Бөйөк Ватан һуғышы йылдары ижады. Һуғыштан һуңғы йылдар ижады. Поэма һәм балладалары. ”Урал”поэмаһы. ”Шағир һәм шаһ”. Патриотизм, власть һәм талант проблемалары. Драматургия.

***Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау.***

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр.***

С.Агиш.”Фәтхи һалдат”хикәйәһе.

Я.Хамматов.”Башҡорттар китте һуғышҡа”романы.

Т.Килмөхәмәтов.”Ҡорбан килтереү”портреттар.

“Һуғыш үтте,һағыш ҡалды”очерктар,хәтирәләр.

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр.***

***Д.Юлтый.***”Атлан,батыр!”,”Ҡарағол”драмаһынан өҙөк.

***М.Буранғолов.***”Башҡорт туйы”драмаһынан өҙөк.

***Ғ.Сәләм.***”Бала”поэмаһынан өҙөк.

***Һ.Дәүләтшина***.”Ырғыҙ”романынан өҙөк.

***Р.Нигмәти***.”Үлтер,улым,фашисты!”поэмаһынан өҙөк.

**11 класс**

***Хәҙерге әҙәбиәт.*** ХХ быуаттың икенсе яртыһында йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙең әҙәбиәткә йоғонтоһо.70-90-сы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтенең идея-тематик яҡтан яңырыуы, жанрҙарҙың төрлөлөгө. Яңы быуын яҙыусылар. 90 - сы йылдарҙа әҙәбиәттә яңы осор башланыуы.

***Хәҙерге поэзия.***Хәҙерге поэзияның үҫеше. Лирикала жанрҙар төрлөлөгө, идея-тематик һәм художество яңылыҡтары.М.Кәрим, Р.Бикбаев, Х.Назаров шиғырҙарында гражданлыҡ мотивтары. Ғ.Рамазанов, Ш.Бикҡол, Р.Бикбаев, А.Игебаев лиро-эпик жанрҙағы поэмалары. Яңы быуын шағирҙары. Хәҙерге поэмалар.Шағирҙар М.Ғәли лирикаһы, поэмалары, Ә.Атнабаев лирикаһы, поэмаһы. Т.Ғәниева ”Ҡыпсаҡтар” поэмаһы, Ф.Туғыҙбаева лирикаһы, поэмалары.

***М.Кәрим***.М.Кәримдең биографияһы һәм йәмғиәт эшмәкәрлеге. Тәүге әҫәрҙәре. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижады. ”Мин фронтҡа китәм,иптәштәр!” шиғыры. “Башҡорт халҡына яуап хат” әҫәренең йөкмәткеһе. Батырлыҡ, мөхәббәт, нәфрәт темаһы. Хат стиле. “Үлмәҫбай” поэмаларын иҫкә төшөрөү. Һуғыштан һуңғы ижады. Шиғырҙарында тыныслыҡ темаһы. ”Европа -Азия” шиғырҙар циклы. ”Ҡара һыуҙар”поэмаһында төп темаларҙың контраст бирелеше: һуғыш һәм тыныслыҡ,батырлыҡ һәм ҡурҡаҡлыҡ. Образдар системаһы. М.Кәрим - драматург. ”Ай тотолған төндә”, ”Салауат”, ”Ташлама утты, Прометей!” трагедиялары. “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесы. *Әҙәбиәт теорияһы*. Фәлсәфәүи лирика.

***Р.Ғарипов.*** Биографияһы һәм ижады. Тәүге осор ижады. Шиғыр йыйынтыҡтары. Хикәйәт һәм ҡобайырҙары. ”Уйҙарым”, ”Аманат” ҡобайырҙары. Поэма һәм балладалары. ”Табыныу”, “Дон-Кихот“ поэмалары. ”Батырша” балладаһы. Тәржемәләре.

***Хәҙерге проза.***ХХ быуат аҙағында оло быуын яҙыусыларының С.Агиш, Ә.Бикчәнтәев, К.Мәргән, Д.Исламов романдары һәм повестары. Урта һәм яңы быуын яҙыусыларының проза әҫәрҙәре. Очерк һәм публицистиканың үҫеше. Тарихи романдар. Хәҙерге юмор һәм сатира. ***Прозаиктар.*** Я.Хамматов. Бөртөкләп йыйылған алтын. Б.Рафиҡов. Мажаралы повестар.Т.Ғарипова ”Бөйрәкәй” романы. Ғ.Шафиҡов. Тарихи әҫәрҙәр.

***Ә.Хәкимов.*** Биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. Ә.Хәким-тәнҡитсе, әҙәбиәт белгесе. Башланғыс ижады. Повестары. Ә.Хәким - романист. Тарихи ромндары. ”Өйөрмә” романы. Утыҙынсы йылдар фажиғәһе. Образдар системаһы.

***Ғ.Хөсәйенов.*** Әҙиптең биографияһы һәм йәмәғәт эшмәкәрлеге. Ғ.Хөсәйенов-тәнҡитсе, әҙәбиәт белгесе, әҙип. ”Батырҙар ҡиссаһы”, ”Тормош”, ”Донъя” парсалар китабы. ”Ҡанлы илле биш” романы.

***Р.Бикбаев.***Тормош юлы һәм фәнни эшмәкәрлеге. Шиғырҙар йыйынтығы. ”Халҡыма хат” поэмаһы, ”Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында социаль, экологик һәм мораль, иҡтисади-этик проблемаларҙың ҡуйылышы. Р.Бикбаевтың ғилми эшмәкәрлеге.

***Хәҙерге драматургия.*** Хәҙерге драматургияла күтәрелгән төппроблемалар. Заман темаһы. Драматургияның жанр төрҙәре.Драматургтар И.Абдуллин, Н.Асанбаев ”Ҡыҙыл паша”, Ф.Бүләков ”Йөрәктә ҡалған эҙҙәр”.

***Хәҙерге әҙәбиәт ғилеме һәм тәнҡит.*** ”Башҡорт әҙәбиәте тарихы” алты томлығы. К.Әхмәтйәновтың әҙәбиәт теорияһы буйынса хеҙмәттәре.

***Н.Мусин.*** Биографияһы һәм ижады. Тәүге хикәйәләре. “Зөһрә” повесы. ”Шайтан ҡуласаһы” повесы. ”Мәңгелек урман” романы.

***А.Абдуллин.*** Яҙыусының биографияһы һәм ижад юлы. “Онотма мине, ҡояш!”, “Ун өсөнсө председатель” драмаһының идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙең популярлығы.

***Р.Солтангәрәев.*** Биографияһы һәм  ижады. Хикәйәләре. Повестары. ”Хамбал” хикәйәһе.

***Д.Бүләков.*** Яҙыусының тормош һәм ижад юлы. ”Килмешәк” романы. ”Ғүмер бер генә” романы.

***Х.Назар.*** Х.Назарҙың тормошо һәм ижады. Шиғырҙарында тыуған ергә, халыҡҡа һөйөүҙең бирелеше. ”Шәмсыраҡ” поэмаһы. Тәржемәләре.

***Бөтә үтелгәндәр буйынса  ҡабатлау йомғаҡлау.***

Ятлау өсөн әҫәрҙәр.
М.Кәрим. ”Мин фронтҡа китәм,иптәштәр!” шиғыры,.Р.Ғарипов.”Аманат”, ”Уйҙарым”ҡобайырҙарынан өҙөк.Р.Бикбаев. ”Халҡыма хат”поэмаһынан өҙөк.

Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр.
М.Кәрим.Ғүмер миҙгелдәре.Р.Ғарипов.Алырымҡош менән Бирмәмҡош.Р.Бикбаев. Ай күргәндәй,ҡояш алғандай.Һайланма поэтик әҫәрҙәр.К.Мәргән. Бөркөт ҡанаты.Роман.Ғ.Ибраһимов.Кинйә.Р.Солтангәрәев.Оло юлдың туҙаны.Ҡ.Аралбаев.Таналыҡ тауышы.Т.Ғарипова. Бөйрәкәй.Х.Назар. Асманға ашыу. Шиғырҙар,поэмалар.Р.Сафин.Ут эсендә бейеү.Т.Йосопов.Лирик шиғырҙар.

Уҡыу-уҡытыу – методик һәм мәғлүмәти-ресурс тәьмин итеү


1. Аслаев Т. Х., Атнагулова С.В. Сюжетные картинки для развития речи. Уфа: Книга, 1996.
2. Аудио-видео пособия по башкирской литературе. Уфа, 2005.
3. Башҡорт теле, башҡорт әҙәбиәте. Электрон дәреслектәр.7-9,10-11, педколледждар өсөн.
4. Габитова З.М., Тулумбаев Х.А. Электронный учебник. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте.ru. Уфа, 2006.
5. Башҡорт теле (5-9) һәм әҙәбиәтенән 5-11) тест һорауҙары. И.Ә. Шарапов. Өфө, 2012.
6. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу. Уҡытыусылар өсөн ҡулланма. М.И. Баһаутдинова, Г.Н. Йәғәфәрова. – Өфө: Китап, 2012.
7. Башҡорт теле һәм туған әҙәбиәт дәрестәрен үҙ-ара бәйләнештә уҡытыу. М.Б.Юлмөхәмәтов, Өфө, 2012.
8. Лирик әҫәрҙәрҙе өйрәнеү. Б.Б. Ғафаров. Өфө: Китап, 2012.
9. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. Б.Б.Ғафаров. Өфө: Китап, 2012.
10. Башкирско-русский словарь пословиц и поговорок. Уфа: Книга, 1994.
11. Скороговорки, чистоговорки, считалочки. Составители: Исянгулова А.Ф., Давлеткулова Г.Ш. Уфа: Рабочая династия, 2008.
12. Журналы: «Учитель Башҡортостана», «Акбузат», «Аманат».
13. Упражнения для физминуток. Методические пособия. Составители: Исянгулова Ә.Ф., Давлеткулова Г.Ш. Уфа: Рабочая династия, 2008.
14. Русско-башкирский учебный словарь. Саяхова Л.Г., Ураксин З.Г. Уфа: Китап, 2001.
15. Исҡужина Ф.С., Вәлиева Г.Д. Башҡорт телендә текст теорияһы һәм методикаһы. Өфө: Китап, 2011.
16. Псчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. Өфө: Китап, 2003.
17. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. 3-сө баҫма. Өфө: Китап, 2004.
18. Баһауетдинова М.И. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен заманса уҡытыу / Уҡытыусылар өсөн ҡулланма. Өфө: Китап, 2009.
19. Шарапов И.Ә. Башҡорт телендә тышыш билдәләре. Өфө: Китап, 2007.
20. Агишев И.М., Биишев Ә.Г. Башҡорт теленең һүҙлеге: 2 томда, Мәскәү, 1993.
21. Ураҡсин З.Ғ. Урыҫса-башҡортса һүҙлек: -2 томда, Өфө, Китап, 2005.
22. Ураҡсин З.Ғ. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге: Өфө, 2004.
23. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге: Өфө, 2006.
24. Әхтәмов М.Х. Грамматика һүҙлеге: Өфө, 2007.

25. Әхтәмов М.Х. Антонимдар: Өфө, 2009.
26. Әхтәмов М.Х. Синонимдар һүҙлеге: Өфө, 2006.
27. Әхмәтов М.Х. Омонимдар (аҙаш һүҙҙәр) һүҙлеге. Өфө: Китап, 2005.
28. Ураҡсин З.Ғ.Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Яңыртылған, 2-се баҫма. Өфө: Китап, 2006.
29. Веб-ресурс для самостоятельного изучения башкирского языка «Интерактивный башкирский» // URL: https://bashlang.ru (дата обращения: 06.06.2022).
30. Мобильное приложение «Самоучитель по башкирскому языку» // URL:https://play.google.com/store/apps/details?id=com.bashkirteacher&hl=ur&gl=US (дата обращения: 06.06.2022).
31. Международная система дистанционного обучения башкирскому языку // URL: https: //region.bspu.ru/mod/page/view.php (дата обращения: 06.06.2022).
32. Мобильное приложение «Башкирский филворд» // URL: https://bashlang.ru (дата обращения: 06.06.2022).
33. Мобильное приложение «IQБАЛА БАШ» // URL: https://bashlang.ru (дата обращения: 06.06.2022).
34. Информационный портал Республики Башкортостан // URL: https://www.bashkortostan.ru/ (дата обращения: 06.06.2022).
35. Русско-башкирский онлайн словарь // URL: http: huzlick.bashqort.com/ (дата обращения: 06.06.2022).
36. Башкирское издательство «Китап» имени Зайнаб Биишевой // URL: http: www.kitap-ufa.ru (дата обращения: 06.06.2022).
37. Культурный мир Башкортостана // URL: http: ebook.bashnl.ru (дата обращения: 06.06.2022).
38. Национальная электронная библиотека РБ // URL: http: ebook.bashnl.ru (дата обращения: 06.06.2022).
39. Башкирская энциклопедия // URL: http: www.bashenc.ru (дата обращения: 06.06.2022).
40. Самоучитель башкирского языка // URL: http: leph.bashedu.ru/publications/samouchitel.pdf (дата обращения: 06.06.2022).
41. Башкирские народные сказки // URL: http://skazkoved.ru/index.php?fid=1&sid=49 (дата обращения: 06.06.2022).
42. Башҡорт бейеү көйҙәре, йырҙары (Башкирские мелодии и песни) // URL: http:allmuz.org/melody (дата обращения: 06.06.2022).

**10-сы класс**

| № | План. дата | Факт. дата | Бүлек, тема |
|---|---|---|---|
| 1 | | | Хәүефһеҙлек дәресе. XX быуат әҙәбиәте |
| 2 | | | Башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуы. Әҙәби процесс тураһында төшөнсә. |
| 3 | | | Дауыт Юлтыйҙың тормош юлы ижады. |
| 4 | | | Д.Юлтый. Ҡан. Романдың проблематикаһы |
| 5 | | | Д.Юлтый. Ҡан. Романда һалдат образдары |
| 6 | | | З.Вәлидиҙең тормош юлы. З.Вәлиди- тарихсы |
| 7 | | | З.Вәлиди- мемуарист. З.Вәлиди. Хәтирәләр |
| 8 | | | М.Буранғолов. Тормош юлы. Башҡорт фольклорын йыйыу һәм өйрәнеү өлкәһендәге хеҙмәттәре |
| 9 | | | М.Буранғолов- драматург. Башҡорт туйы. Мелодрама |
| 10 | | | Ғ.Хәйри. Тормош юлы |
| 11 | | | Ғ.Хәйри. Боролош. Роман |
| 12 | | | Утыҙынсы йылдар әҙәбиәте |
| 13 | | | Һәҙиә Дәүләтшина. |
| 14 | | | Һ.Дәүләтшина. Ырғыҙ. Романдың яҙылыу тарихы, авторҙың ижади маҡсаттары |
| 15 | | | Һ.Дәүләтшина. Ырғыҙ. Романда башҡорт халҡы тормош-көнкүрешенең сағылышы |
| 16 | | | Хәүефһеҙлек дәресе. Әҙәби тип. Әҙәбиәттә типиклаштырыу. Прототип. Роман-эпопея |
| 17 | | | Ғәлимов Сәләм. Юмористик шиғырҙары |
| 18 | | | Ғ.Сәләм. Бала. Поэма |
| 19 | | | Бөйөк Ватан һуғышы йылдары әҙәбиәте |
| 20 | | | Рәшит Ниғмәти. Поэзияның киң юлында |
| 21 | | | Баязит Бикбай. Ҡарлуғас. Драма |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 22 | | | Б.Бикбай. Салауат. Драма |
| 23 | | | Б.Бикбай. Драмаларҙа образдар системаһы |
| 24 | | | Зәйнәб Биишева шиғриәте |
| 25 | | | З.Биишева. Кәмһетелгәндәр. Роман |
| 26 | | | З.Биишева. Кәмһетелгәндәр. Роман |
| 27 | | | З.Биишева. Яҡтыға. Роман |
| 28 | | | Һуғыштан һуңғы осор әҙәбиәте. Проза |
| 29 | | | Поэзия |
| 30 | | | Драматургия |
| 31 | | | Назар Нәжми. Шағир һәм Шаһ. Поэма |
| 32 | | | Үтелгән әҫәрҙәргә байҡау яһау. Дөйөмләштереү |
| 33 | | | |

**11-се класс**

| № | План. дата | Факт. дата | **Бүлек, тема** |
|---|---|---|---|
| 1 | | | Хәүефһеҙлек дәресе. Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте |
| 2 | | | Хәҙерге поэзия. Әҙәби портреттар |
| 3 | | | Мостай Кәрим шиғриәте. Ҡара һыуҙар. Поэма |
| 4 | | | Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. Повесть |
| 5 | | | Ай тотолған төндө. Трагедия |
| 6 | | | Ташлама утты, Прометей! Трагедия |
| 7 | | | Рәми Ғарипов шиғриәте. Дон-Кихот. Батырша |
| 8 | | | Интегралдар поэмаһы. Табыныу. Поэма |
| 9 | | | Хәҙерге проза |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 10 | | | Я.Хамматов. Т.Ғарипова |
| 11 | | | Ә.Хәкимов. Өйөрмә. Роман |
| 12 | | | Өйөрмә. Роман. Шәхес культы |
| 13 | | | Ғ.Хөсәйенов тормошо. Тормош. Парсалар |
| 14 | | | Рудасы Исмәғил Тасим улы |
| 15 | | | Ҡанлы илле биш. Роман |
| 16 | | | Хәүефһеҙлек дәресе. Ҡанлы илле биш. Роман |
| 17 | | | Хәҙерге драматургия |
| 18 | | | Нәжиб Асанбаев |
| 19 | | | Хәҙерге әҙәбиәт ғилеме һәм тәңҡит |
| 20 | | | Ә.Харисов. К.Әхмәтйәнов |
| 21 | | | Рауил Бикбаев шиғриәте. Һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ! Поэма |
| 22 | | | Халҡыма хат |
| 23 | | | Ноғман Мусин повестары. Әҫәрҙәрендә кеше һәм тәбиғәт мәсьәләһе. Шайтан ҡуласаһы. Повесть |
| 24 | | | Мәңгелек урман. Роман |
| 25 | | | Мәңгелек урман. Роман |
| 26 | | | Азат Абдуллин драматургияһы. Ун өсөнсө председатель |
| 27 | | | Рәшит Солтангәрәев- яҡташ яҙыусы |
| 28 | | | Беҙ йәшәгән ер. Роман |
| 29 | | | Динис Бүләков хикәйәләре |
| 30 | | | Ғүмер бер генә. Роман |
| 31 | | | Хәсән Назар ижады |
| 32 | | | Йомғаҡлау, дөйөмләштереү |
| 33 | | | |